Мин бәхетле тыуған еремдә!

Башҡортостан - беҙҙең Башҡортостан,
Иркең ҡурсып күпме бөркөт осҡан!
Башҡортостан-йөрәк ҡағышым,
Ерһенмәһәм,төшһөн ҡарғышың!..

(Рәми Ғарипов)

Беҙҙең Башҡортостан шундай матур! Бай тарихлы, матур тәбиғәтле, саф һауаһылы. Шундай матурлыҡта һандуғастың моңло йырҙары яңғырай! Башҡортостанда сикһеҙ күп ер байлыҡтары бар. Урмандарында төрлө-төрлө йәнлектәре, йылғаларында балыҡтары, ер аҫтында аҫыл таштары, нефтьятҡылыҡтары… Барыһы ла бар минең тыуған еремдә.

Халҡымдың ҡурай моңона кемдәр генә һоҡланмай! Йырҙарыбыҙ, бейеүҙәребеҙ бик матур. Илемдең матурлығы, халҡымдың батырлығы бик күп шағирҙарыбыҙҙың шиғырҙарынды данланған:

Ай, Уралым, Уралым,
Күгәреп ятҡан Уралым
Нурға сумған түбәһе
Күккә ашҡан Уралым,

- тип данлай Салауат Юлаев тыуған Уралын.

Мин иң матур ҡалаларҙың береһе Өфө ҡалаһында тыуҙым. шулай Үҙ ҡаламджы бик-бик яратам. Өфө театрҙары, парктары, аллеялары, төрлө һәйкәлдәре, Ағиҙел, Ҡариҙел, Дим йылғалары, ҡала урамдарындағы фонтандары, бейек-бейек йорттары менән матур. Беҙҙә балалар бәхетле, сөнки уҡыусылар йылы, яғкты мәктәптәрҙә белем алабыҙ. Йәй көнө матур итеп үткәрәбеҙ, лагерҙарза рәхәтләнеп ял итәбеҙ. Төрлө милләт халыҡтары менән татыу йәшәйбеҙ. Башҡортостаныбыҙ көндән - көн матурлана, данлана. Мин илемде, еремде, телемде яратам!

Кинйәбулатов Мораҙым, 5А класы.